*Айһылыу НАФИКОВА*

# Туған телгә арналған яҙмыш



*Фәриҙә Фәрмүт ҡыҙы Ситдиҡова*

Һуңғы йылдарҙа мәғариф өлкәһенә, уҡытыусыларға иғтибар бермә-бер артты: 2006 йылдан алып мәғариф өлкәһендә өлгәшкән ҙур уңыштары өсөн бик күп мәктәптәргә һәм уҡытыусыларға Рәсәй Президентының гранты бирелә башланы. 2006 йылда Башҡортостандан 109 мәктәп һәм 363 уҡытыусы Рәсәй күләмендә иғлан ителгән абруйлы һәм яуаплы бәйгеләэ еңеү яуланы һәм ярыш шарттарына ярашлы һәр мәктәп — 1 миллион, ә һәр уҡытыусы 100 мең һум күләмендә аҡсалата премия алғайны. 2007 йылда ла республикабыҙ мәктәптәре һәм уҡытыусылары һынатманы. Тағы 109 мәктәп һәм 363 уҡытыусы бәйге грантына лайыҡ булды.

Бәйге лауреаттары араһында гимназиялар, лицейҙар, ябай мәктәптәр, төрлө предмет уҡытыусылары бар. ”Хеҙмәтенә күрә хөрмәте” тигән әйтем ошо миҫалда айырыуса асыҡ күренә. Абруйлы бүләккә лайыҡ булыусылар араһында Учалы районы Ураҙ лицейының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Фәриҙә Фәрмүт ҡыҙы Ситдиҡова ла бар.

Бына 34 йыл инде мәктәптә балаларға туған тел серҙәрен аса ул. Ошо дәүер эсендә ул уҡытҡан малайҙар һәм ҡыҙҙар, үҫеп етеп, үҙаллы тормош юлына аяҡ баҫҡан, араларында яратҡан уҡытыусыларының һөнәрен һайлаусылар ҙа байтаҡ. Әйтәйек, шул уҡ Ураҙ мәктәбендә әле башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрен уҡытҡан Зөлфиә Рамазан ҡыҙы Айытбаева бына нимә ти:

— Мәктәптә уҡығанда башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрен түҙемһеҙләнеп көтөп ала торғайным. Фәриҙә Фәрмүт ҡыҙы дәрестәрҙе бай йөкмәткеле, ҡыҙыҡлы итеп үткәрә ине. Теге йәки был яҙыусының биографияһына, өйрәнәсәк әҫәренә ҡыҙыҡһыныу уята алғаны, туған телгә, тыуған төйәккә һөйөү тәрбиәләгәне өсөн яраттыҡ, ихтирам иттек беҙ уны. Күбебеҙҙең уҡытыусы булып китеүендә, айырыуса минең кеүек башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы һөнәрен һайлауында Фәриҙә Фәрмүт ҡыҙының хеҙмәт өлөшө ифрат ҙур. Әле бына үҙем уҡытып йөрөһәм дә ул минең өсөн уҡытыусым булып ҡала, һәр ваҡыт фай-

ҙалы кәңәштәр биреп тора, методик ярҙам күрһәтә. Үҙ эшенә мөкиббән, хеҙмәтенә яуаплы мөнәсәбәте менән беҙгә һәр саҡ өлгө.

Эйе, юғары категориялы уҡытыусы, мәғариф алдынғыһы, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы Фәриҙә Фәрмүт ҡыҙы башҡорт теле дәрестәрен юғары кимәлдә, методик йәһәттән дөрөҫ итеп үткәреүгә ҙур иғтибар бирә. Уҡыусыларҙың фекерләү эшмәкәрлеген, зиһенен үҫтереүгә йүнәлеш таба белә. Ғөмүмән, алдынғы уҡытыусының уҡыусылары һәр теманы үҙҙәре уйлап, фекерләп, эҙләнеп аңлауға ирешә. Фәриҙә Фәрмүт ҡыҙы ғәҙәти ялҡытҡыс эш төрҙәрен ҡулланырға яратмай, киреһенсә, ҡыҙыҡлы асыштар вәғәҙә иткән дәрестәрҙе йыш файҙалана. Мәҫәлән, уның дәрес-хәтер һынаш, дәрес-семинар, һорау-яуап дәресе, дәрес-лекция, дәрес-анализ кеүек эш алымдары ҡыҙыҡлы.

Тәжрибәле уҡытыусы мәктәп, район күләмендә күп төрлө асыҡ дәрестәр бирә. Мәҫәлән, мәктәп-ара бәйләнеш программаһында Ҡунаҡбай урта мәктәбе уҡытыусыларына Мостай Кәримдең "Үлмәҫбай" поэмаһы буйынса "Һунарсы ата-бабам, һунарсы ҡаны үҙемдә, һунарсы булыр балам" темаһына юғары кимәлдә асыҡ дәрес күрһәтеп юғары баһа алған.

Уҡытыусының эш һөҙөмтәһен уҡыусыларының белем кимәленә, бәйгеләрҙә яулаған урындарға ҡарап баһалайҙар. Был йәһәттән дә һынатмай тәжрибәле уҡытыусы. Уҡыусылары башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса район олимпиадаларында даими рәүештә призлы урындар яулап килә. Әйтәйек, 2003—2004 уҡыу йылында Ләйсән Әфләтүнова, Алина Хажиева, Гүзәлиә Шәғәлиналар 1-се урын яулаған, 2004—2005 йылда ла ҡыҙҙар һынатмаған, 2005—2006 йылда Алина менән Гүзәлиә икенсе призға лайыҡ булған. Туған телгә һөйөү, үҙ теленә, үҙ ереңә ихтирамлы булыу уның уҡыусыларын киләсәктә ошо йүнәлештә эшләүгә этәрә. Йыл һайын кәм тигәндә 2—3 уҡыусыһының Башҡорт дәүләт университетының башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетына уҡырға инеүе быны асыҡ дәлилләй.

Фәриҙә Фәрмүт ҡыҙы етәкләгән "Йәш хәбәрсе" түңәрәгенә лицей уҡыусылары ҙур кинәнес менән йөрөй. 1999—2006 йылдарҙа район һәм республика матбуғат баҫмаларында йыш сығыш яһағандары өсөн түңәрәк ағзалары "Шәреҡ" радиоһының Абдулла Ғәниев исемендәге премияһына лайыҡ булған (А.Ғәниев — Ураҙ ауылынан, "Шәреҡ" радиоһына нигеҙ һалыусы. Уның исемен мәңгеләштереү өсөн Ураҙ лицейында ошондай премия булдырылған).

Лицей уҡыусылары төрлө шиғри бәйгеләрҙә лә әүҙем ҡатнаша. Ләйсән Әфләтүнова "Йәншишмә" гәзитенең "Йәш хәбәрсе" танытмаһына лайыҡ булған, әле БДУ-ла уңышлы уҡып йөрөй.

Башҡортостандың Рәсәйгә ҡушылыуының 450 йыллығы айҡанлы "Юлдаш" радиоһы иғлан иткән бәйгелә лә Фәриҙә Фәрмүт ҡыҙының уҡыусылары әүҙем ҡатнашҡан һәм дүрт уҡыусыһы призлы урындар яулауға өлгәшкән. Ошо радиоканалдың "Изге хәбәрҙәр" рубрикаһында тапшырыуҙарҙа даими сығыш яһаған Эльвина Шәрипова ла абруйлы бүләккә лайыҡ булған.

Фәриҙә Фәрмүт ҡыҙының уҡыусылары "Халыҡ ынйылары", фольклор, төрлө шәжәрә байрамдарында әүҙем ҡатнаша.

Алдынғы уҡытыусы методик эштәргә ҙур иғтибар бирә, педагогика буйынса мәҡәләләре менән республика матбуғатында, айырып



әйткәндә, ”Башҡортостан уҡытыусыһы” журналында йыш сығыш яһай. Бынан тыш, Ураҙ ауылында бер генә сара ла унан башҡа үтмәйҙер. Фәриҙә Фәрмүт ҡыҙы уларға сценарий яҙа, үҙе ошо сараны тормошҡа ашырыуҙа ихлас ҡатнаша. Мәҫәлән, 2006 йылда ”Лицейға — 100 йыл”, ауылдаш яҙыусылары Ғ.Хөснуллиндың ”Сәләмем” китабының исем туйының, ”Бабич һәм сәхнә” әҙәби-музыкаль кисәнең сценарийҙарын яҙған һәм алып барған.

Ҡыҫҡаһы, янып-дөрләп эшләй Фәриҙә Фәрмүт ҡыҙы. Йәшлегендә күңеленә ҡунған изге һөнәрен әүлиәләй күргәнгәләр, күрәһең. Ысынлап та, бар ғүмереңде балаларға, мәктәпкә, туған телде уҡытыуға арнау өсөн ысын мәғәнәһендә патриот булырға кәрәктер. Юғиһә, заманында бейеүсе булырға тигән хыялы ла күңел ҡылдарын тибрәткәйне бит. Әле лә сәхнәлә, телевизор аша бейегән кешеләрҙе күрһә, йөрәге ярһып тибә башлай. Әммә уҡытыусының һәр яҡлап талант эйәһе булырға тейешлеген күҙ уңында тотҡанда Фәриҙә Фәрмүт ҡыҙынан барыһы ла уңды. Бәрәкәтле Учалы ерендә, хозур тәбиғәт ҡосағында урынлашҡан Ҡалуй ауылында (был ауылдың икенсе бер матур исеме — Кәкүк, Учалы халҡы уны шулай атап йөрөтә) тыуып үҫкән Фәриҙә хеҙмәт юлын 1973 йылда Ҡалуй башланғыс мәктәбендә башлап китә. Артабан ситтән тороп уҡып БДУ-ның филология факультетын тамамлай. 1976 йылда ике йәш белгесте — тормош иптәше Алмас Бәхтиәр улы менән Фәриҙәне Ураҙ ауылына эшкә ебәрәләр. Алмас колхозда зоотехник, артабан парторг, колхоз рәйесе булып эшләй, Фәриҙә Ураҙ урта мәктәбендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрен уҡыта. Икеһе лә эштә ҡайнай. Татыу ғаиләлә өс бала үҫә. Хәҙер улар үҫеп буй еткергән. Өлкән ҡыҙҙары Гүзәл Ситдиҡова, БДУ-ның башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетын тамамлап, әлеге ваҡытта ”Юлдаш” радиоканалында матур тапшырыуҙар алып барған журналист. БДПУ-ның башҡорт филологияһы факультетын тамамлаған Гөлназ ”Ватандаш” журналында корректор булып эшләй. Улдары Азат әсәһенең тәүге хыялын тормошҡа ашырмаҡсы — ул Башҡорт дәүләт университетының тарих факультеты студенты.

Фәриҙә Фәрмүт ҡыҙы әсәһенең өгөт-нәсихәтен һәр саҡ иҫтә тотоп йәшәй: ”Уҡы — кеше булырһың”, — тип әйтер булған Вазифа апай ҡыҙҙарына. Әсәһенең тағы бер әйтемен иҫтән сығармай: ”Кешегә таш менән атма, аш менән ат, таш еңмәҫ, аш еңер”, тип ҡабатлар ине ул. Бына шуға ла дуҫтары, әхирәттәре бихисап уның. Кәңәш һорап килгәндәргә кәңәш бирә, йомош һорағандарҙы ла буш итмәй. Ауылда уҡытыусы кешенең һәр аҙымы күренеп тора. Шуның өсөн эшендә лә,

ғаилә тормошонда ла үрнәк булырға тейешлеген яҡшы аңлай Фәриҙә Фәрмүт ҡыҙы, был йәһәттән дә һынатҡаны булманы.

Шуға ла коллегаларының, ауылдаштарының оло ихтирамын тойоп, һаман да йәштәрсә һәр нәмәгә өлгөрөп, һәр уңышҡа ҡыуанып йәшәй ул.

— Фәриҙә Фәрмүт ҡыҙы менән оҙаҡ йылдар бергә эшләнек, — ти хәҙер инде хаҡлы ялда булған башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы Зифа Фәсхетдин ҡыҙы Шәһиева. — Мин уны үҙ эшенең оҫтаһы тип беләм. Бик ныҡышмал, үҙенә лә, башҡаларға ла талапсан кеше ул. Коллективта үҙен бик ихтирам итәләр. Уҡыусыларға төплө белем бирә. Уларҙың төрлө бәйгеләрҙә даими призлы урындар яулауы быны асыҡ раҫлай. Мәктәптә, ауылда үткән бөтә сараларҙа әүҙем ҡатнаша, беҙҙе лә йәлеп итә.

Бынан тыш, районның ”Яйыҡ” гәзитенең әүҙем хәбәрсеһе лә Фәриҙә Фәрмүт ҡыҙы. Уның фәһемле мәҡәләләре, очерктары, хикәйәләре район гәзитендә генә түгел, ”Йәшлек”тә лә йыш баҫылып тора. Күңеленә дәрт ҡунғанда шиғырҙар ҙа яҙа.

...Ғүмер аҡҡан һыу кеүек, тиҙәр. Фәриҙә Фәрмүт ҡыҙының да ғүмер йомғағы алтын үрҙәрҙе артылған. Өс тиҫтәнән артыҡ педагогик стажы булған тәжрибәле уҡытыусы бик күп бәйгеләрҙә еңеүсе, призлы урындар яулаусы. Әле бына 2007 йылда үҙенә абруйлы премия — Рәсәй Президенты тарафынан булдырылған грант бирелеүенә ихлас ҡыуана ул. Хеҙмәте юғары баһаланған һәр шәхес шулай итәлер. Грант иһә киләсәктә тағы ла тырышыбыраҡ эшләргә дәртләндерә Фәриҙә Фәрмүт ҡыҙын.

Талантлы уҡытыусы хаҡында мәҡәләне уның тағы бер хеҙмәт емеше, күңел бүләге — шиғыры менән тамамлайһы килә. Сөнки унда Фәриҙә Фәрмүт ҡыҙының бар асылы сағыла.

### РӘХМӘТ ТУҒАН ТЕЛЕМӘ

Хеҙмәтемде ҙурланылар —
Рәхмәт Тыуған илемә!
Берҙәм, көслө коллективҡа,
Рәхмәт туған телемә!

Ябай башҡорт ҡыҙы инем,
Кескәй генә ауылдан.
Маҡсат ҡуйҙым, алға барҙым,
Тайпылманым юлымдан.

Әҙәбиәт, тел хаҡында
Ғүмер буйы уйландым.
Балаларға һөйөүем ҙур —
Яҙмышымды арнаным.

Уларҙы һис айырманым
Типтәренә, башҡортҡа.
Берҙәй мөхәббәт уяттым
Башҡортостан — баш йортҡа.